# ҒӘЙНАН ХӘЙРИҘЕҢ “БОРОЛОШ” РОМАНЫНДА ЯБАЙ ҺӨЙЛӘМДӘР ҠУЛЛАНЫЛЫШЫ



**Мин үҙемдең тикшеренеү эшемдә был шәхестең ҡыҫҡа ғына ғүмерендә ни тиклем эш башҡарыуын, ниндәй ауыр һәм фажиғәле ғүмер итеүен һәм, әлбиттә, уҡымышлылығын иҫбатларға тырыштым. Уның ижадын өйрәнеп, уның йәшәү маҡсатын һәм ниндәй уйҙар борсоуын белергә теләнем. Был эшемдең маҡсаты.**

**Бөгөнгө көндә башҡорт әҙәбиәте менән ҡыҙыҡһыныу арта бара, дәрестәрҙә беҙ арҙаҡлы шәхестәрҙе өйрәнәбеҙ, ләкин улар тураһында киң белемдәр дәреслектән генә алып булмай. Шуға күрә башҡа мәғлүмәттәр аша улар тураһында материалдар туплап, артабан кластарштар менән бәхәстәр ойоштороп әңгәмәләшеү өсөн был эшемдең ярҙамы уңайлы булыр. Эштең актуаллеген шунда күрәм.**

# Ғайнан Хәйриҙең ижадын өйрәнеүсе ғалимдар




Суфиян Сафуанов



Нәғим Ишбулатов



Ғәли Сәйетбатталов



Ғайнан Хәйриҙең 110 йыллығына бағышланған кисәләр хаҡында



# ҺӘР ЯҠТАН ДА ҺӘЛӘТЛЕЛӘР

*— Беҙҙә һәләтле балалар күп, улар менән танышырға махсус килегеҙ, — тип оҙатып ҡалды мәктәп директоры Зәйтүнә Әхмәт ҡыҙы Хажиәхмәтова.*

*Был юлы иһә беҙҙең, Башҡортостан Яҙыусылар союзынан идара рәйесе урынбаҫары, шағирә Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, ғалим, филология фәндәре докторы, яҙыусы Мирас Иҙелбаев, журналист һәм шағирә Зөһрә Ҡотлогилдина, Нуриман районында йәшәгән яҡташ шағирә Хәлисә Мөҙәрисоваларҙың, Яңы Күлгә барыуыбыҙҙың сәбәбе башҡа ине.*

Беренсе башҡорт романы «Боролош»тоң авторы, яҙыусы Ғәйнан Хәйриҙең тыуыуына 110 йыл тулыу уңайынан хәтер кисәһенә саҡырғайнылар.

Район китапханаһы хеҙмәткәре Ғәлиә Сабирова, район музейы директоры Мәжит Хажиев, Ғәйнан Хәйриҙең туғаны, күрше Иҫке Күл ауылы хакимиәте башлығы Булат Зәйнуллин, прозаик Мирас Иҙелбаевтар яҙыусының ижады, тормош юлы, яҙмышы хаҡында бик мауыҡтырғыс итеп һөйләне. Залда йыйылған райондың башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары был осрашыуҙан үҙҙәре өсөн файҙалы мәғлүмәттәр алғандыр.

Ҡунаҡтарҙың барыһын да иң һоҡландырғаны, әлбиттә, уҡыусыларҙың сығышы булды. XI синыф уҡыусыһы Гөлнур Бикбаева башҡорт халыҡ йыры «Сыбай ҡашҡа»ны моңло һәм һәр боролошон еренә еткереп башҡарҙы. Тамашасылар уны иҫтәре китеп тыңланы.



«Ынйылар» бейеү ансамбле «Гөлнәзирә»не башҡара.

тиклем араларынан «Яҙғы тамсылар» республика балалар йыр бәйгеһендә Гран-при һәм I урындарҙы яулаусы уҡыусылар ҙа булған. Гөлнур ҙа, моғайын, киләсәген йыр менән бәйләргә уйлайҙыр.

VII синыфтан Рәзил Камалов сәхнәгә милли кейемдә сыбырткөтөп ултырһа, сыбыртҡыһын шартлатып ебәрҙе лә башҡорт халыҡ йыры «Гөлкәйем»де дәртле итеп башҡарып, залдағыларҙы үҙенә ҡаратты. Һәләтле кеше бөтә яҡтан да һәләтле була, тип юҡҡа әйтмәүҙәренә тағы бер ҡат ышандыҡ: Рәзил бейеп тә ебәрҙе, итек ҡунысына ҡыҫтырған

Иң бәләкәс ҡыҙ, IV синыф уҡыусыһы Ләйсән Камалова ла барыһын да моңло тауышы менән хайран ҡалдырҙы. Ул «Саҡ менән Суҡ» бәйетен һоҡландырғыс башҡарҙы.

Ә инде сәхнә тултырып, ҡыҙҙар, малайҙар «Гөлнәзирә» бейеүенә сыҡҡас, был мәктәптә сәнғәткә, ысынлап та, ҙур иғтибар бүленгәненә шигебеҙ ҡалманы. Ауыл клубында директор булып эшләүсе Хәлим Шәмғул улы Хәлилов мәктәптә «Ынйылар» бейеү ансамблен дә етәкләй. Ә музыка уҡытыусыһы Наил Ғәбиҙулла улы Бикмөхәмәтов «Ҡариҙел» вокаль ансамбленә йөрөүселәр менән етди шөғөлләнә.

Бына шуға ла — бейеү булһынмы, йырмы — Яңы Күл уҡыусыларының сығышы профессиональ кимәлгә еткерелеүе менән һоҡландыра.

Район өсөн ошондай мөһим сараны иғтибарҙан ҡалдырмай, үҙҙәренән сыҡҡан шәхестәргә ихтирам күрһәтеп, мәғариф бүлеге етәксеһе Минислам Фәтих улы Ғәлиәскәров менән мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Лениза Шаһбал ҡыҙы Хәлиловаларҙың да ҡатнашыуы маҡтаулы күренеш. Шәхестәрен күтәргән халыҡ ҡына үҙен күтәрә, тигәнде Нуриманда йәшәүселәрҙең олоһо ла, кесеһе лә яҡшы аңлай.



Гөлнур Бикбаева йырлай.



Рәзил Камалов һәләте менән һоҡландырҙы.



АВТОР фотолары.